# Балаларҙың  уйынына ата - әсәләрҙең ҡарашын нисек үҙгәртергә?

Хәзерге заман талаптарына ярашлы ата - әсәләр балаларының белем кимәленә иғтибарҙын  йүнләлтәләр.Уларҙы  балаларының киләсәге боросой . Ата - әсәләр фекере буйынса  уларҙың балалары аяуаһыҙ, рәхимһеҙ  донъяла йәшәргә тейеш булалар. Шуға күрә ата - әсәләр балаларҙың мәктәпкәсә  осорона  әллә ни  иғтибар бирмәйҙәр. Ә мәктәпкәсә йәштәге баласаҡ осоро – айырыуса матур, балаларҙың бөтә яҡлап үçешенә ныҡлы нигеҙ һалынған мәл. Ата - әсәләрҙең был аспекттты аңламауҙары уларҙың балаларҙан “алыçлашыуына” килтерә.Һөҙөмтәлә, балаларҙың аҡыл – зиһен һәләтлеге, донъяны танып белеү һәләттәре кәмей. Ошо ябай булмаған хәлдән сығыр өсөн ата - әсәләргә балалар торомошо менән ҡыҙыҡһынырға, улар менән күберәк аралашырға  тәҡдим ителә.  Шул ваҡытта ғына балаларҙың һәләттәре асыла бара, үҙҙәрен уратып алған донъя менән ҡыҙыҡһыныуҙары көсәйә.

Сюжетлы – ролле уйындарҙың был осраҡта әһәмиәте ҙур.

*Уйындар аша бала нимәләргә өйрәнә һуң?*

1. ололар тормошона күҙ һала, уларға оҡшарға тырыша.;
2. башҡаларҙың тормш ситуцияларын үҙ итеп, уларҙың ҡылыҡтарын һәм хәрәкәттәрен аңлай ала;
3. ролгә инеп уйнау балаға үҙенә сит күҙлектән  ҡарарға ярҙам итә,өлкәнәдәр һәм балалар араһындағы мөнәсәббәттәрҙе реаль итеп күрһәтә;
4. үҙе өсөн асыш яһай: башҡаларҙың уй – теләктәре минеке менән тап килмәçкә  мөмкин;
5. үҙ – үҙенде хөрмәт итергә һәм ышанырға өйрәтә.

Уйын – ул балаларҙың уңыш һәм ҡаҙаныш аренаһы. Ололарҙың бурысы- балаларҙың уйындары менән ҡыҙыҡһыныуҙарын белгертеп , балаларҙа үҙ – үҙенә булған ышанысын нығытыу.

Бынан тыш һәр бер бала ата - әсәләрҙең бер нәмәгә ҡарамай үҙен яратыуына, хөрмәт итеүенә ышанырға тейеш. Был бала үҫеше өсөн иң мөһим шарт.

6. килеп сыҡкан проблемаларҙы сискәндә үҙ көсөнә ышанырға тейеш;
7. уйын барышында һәм тормошта ла үҙенең фекерен иркен әйтергә тейеш. Бик йыш ҡына балалар ата - әсәләргә ярарға тырышып уларға оҡшамаған уй – фекерҙәрен, теләктәрен белдермәҫкә тырышалар. Бындай ҡылыҡ уйында асыҡ сағыла. Бала үҙен ышанıслы тотмай башлай, алдашырға өйрәнә, ҡыйыулығы юҡка сыға. Шуға күрә ата - әсәләр балаларының эмоцияларына ыңғай ҡараштa булырға тейештәр.

## ӨЛКӘНДӘРГӘ КӘҢӘШТӘР

- Балалар менән йышыраҡ уйнағыҙ;
- Балаларҙың бөтә тойғоларын да үҙ итегеҙ, әммә тәртибен төҙәтегеҙ.;
- Балағыҙҙың үҙ тиҫтерҙәре менән яҡшы мөнәсәбәттә булыуын хуплағыҙ;
- Уйын менән ҡыҙыҡһынмаған балаға айырыуса иғтибарлы булығыҙ.